Үрикшин Садиҡ

1911 йылда тыуған

Ғаиләлә апаһы Кәримә, һеңлеһе Хәтирә була. Атаһы һәм инәһе бер генә улдарын бик иркәләп үҫтерәләр. Бала ваҡытынан уҡ ул атаһына булышлыҡ итә башлай. Ә үҫмер йылдарында атаһының ышаныслы ярҙамсыһына әйләнә.

Садиҡ ағайҙың балалыҡ һәм үҫмер йылдары үҙгәрештәр дәүеренә тура килде, был осор дәүерҙә ул күпте күреп, күп нужалар кисереп, сынығып үҫте. Һуғышҡа тиклем ул колхоздың төрлө эштәрен башҡарҙы.

Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән һуғышҡа алына. Һуғыш йылдарын хәтерләп, ул түбәндәгеләрҙе һөйләгәйне:

„Мин 1941 йылда һуғышҡа киттем. Алькино лагерендә һәм Куйбышев ҡалаһында сапёрлыҡҡа өйрәттеләр ҙә фронтҡа оҙаттылар. Украинала сапёрҙар полкы составында һуғышҡа индем. Минең иң ныҡ хәтерҙә ҡалғаны Харьков ҡалаһы өсөн барған һуғыштар. Был ҡала өсөн бер аҙна һуғыш барҙы. Ошо һуғышта бик күп иптәштәребеҙ үлеп ҡалдылар, күп иптәштәребеҙ ранен булдылар. Мин иҫән ҡалдым. Үҙемдең иҫән ҡалыуыма үҙем аптырайым. Артиллерия атҡанда һәм дошман самолеттары бомбить иткәндә, окоптарҙы,

траншеяларҙа йөрөп киттек. Шул ваҡытта Кендер үлгәк, Кендер яраһы булған. Ә мин иҫән ҡалдым. Аҙаҡтан мине пехотаға - 6 ротаға ебәрҙеләр. Ошо пехотала хеҙмәт иткәндә бер ҡала өсөн бик ҡаты һуғыш булды. Немецтәр ошо ҡаланы алыу өсөн һөжүмгә күсте. Ә беҙ оборонала. Ошо һуғышта мин өс немец һалдатын атып үлтерҙем. Рота командиры строй алдында миңә һәм бер нисә иптәшемә рәхмәт белдерҙе. Тағы ла һуғыштар. Бына ошо һуғыштарҙың береһендә мин ҡулдан нык яраландым. Тәүҙә санротала, ә унан һуң госпитальдәрҙә дауаландым. Тереләп сыҡҡас һәм хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ булыс, ауылға ҡайтарып ебәрҙеләр. Яралыларҙан 1942 йылда бөтөрөлгәнән һуң мин икенсе кеше булып ҡайттым, минән һуң Кәримов Зиннәт ҡайтты".

Сәдиҡ ағай, инвалид булһа ла ҡайтыу менән эшкә тотона. Тәүҙә полевод, колхоз правлениеһе аттарына конюх булып эшләне. Оҙаҡ йылдар колхоз урманында лесник булып эшләне.

Үҙ ҡайҙа ғына эшләһә лә ныҡ намыҫ менән эште башҡарҙы. Уның холҡо йомшаҡ, йомшаҡ һүҙле, кешеләргә яҡшы ҡараусы. Сәдиҡ ағайҙың төп һыҙаттары ш... Шуның өсөн дә уны ауыл халҡы ихтирам итте, хөрмәтләне, яратты. Сәдиҡ ағай тормош иптәше Фәлимә апай менән бергәләп 2 ул (Фатих, Фәкил), 2 ҡыҙ (Фәниә, Әкләмә) тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Улар ҙа үҙ-алла тормош юлына баҫтылар.

Оҙаҡ һәм ҡаты ауырығандан һуң 1988 йылдың 21 февралендә вафат булды.

5/II-95 й.